# Көйөргәҙе районынан сыҡҡан арҙаҡлы шәхестәр

**Абдрахманов Ҡотлогилде**. Кинйә Арыҫлановтың ике туған ҡустыһы. Бошман-Ҡыпсаҡ олусы старшинаһы. Бугасәү ихтилалында тәүге көндәрҙән үк һуғыша, Ырымбурҙы ҡамауҙа әүҙемлек күрһәтә. Михельсон тарафынан бола баҫтырылғас, ҡасып йөрөй. 1774 йылда Тимашевҡа ҡаршы яуға күтәрелә лә Мәскәү юлында хәрәкәт итә. Шул йылдың октябрендә баш һалырға мәжбүр була.

**Абдуллин Абдулла Нәби улы** 1936 йылда Таймаҫ ауылында тыуған. Урта мәктәпте тамамлағас, нефть институтының тау-нефть факультетында уҡый. 1958 йылда Арлан нефть ятҡылығын үҙләштерә. Краснокама районында партияның район комитеты сәркәтибе итеп үрләтелә. Үҙ һөнәрен үтә яратҡанлыҡтан үҙ теләге менән яңынан промыселгә ҡайта. Оператор, участок етәксеһе, НГДУ «Уфанефть»тә, Өфө быраулау эштәре идаралығында капиталь төҙөлөш начальнигы урынбаҫары вазифаһын үтәй. Әле «Башкирнефтепродукт» асыҡ акционерҙар йәмғиәтендә капиталь төҙөлөш етәксеһе булып эшләй.

**Аҙнабаев Марат Тәлғәт улы** 1939 йылда Яҡшымбәт  ауылында тыуған. Врач-офтальмолог, БР ФА академигы, медицина фәндәре докторы, профессор, РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған врачы, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре. Башҡортостан медицина институтын тамамлағандан һуң, шунда уҡ тиҫтә йыл күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтында директор, бер үк ваҡытта институттың күҙ ауырыуҙары кафедраһында доцент, кафедра мөдире була. 1981 йылдан алып үҙе ойоштorған Рәсәйҙең Урал, Көнбайыш Себер төбәктәрен хеҙмәтләндереүсе Өфө өлкә-ара күҙ микрохирургияһы үҙәген етәкләй. 170-кә яҡын ғилми хеҙмәт авторы, уйлап тапҡан эштәре өсөн 27 авторлыҡ танытмаһы бирелгән. Канада имплантологтары йәмғиәтенең почетлы ағзаһы. Ҡара ҡылау һәм күҙгә рефракция хирургиялары буйынса халыҡ-ара совет ағзаһы. Йәмәғәт эшмәкәре.

**Аҙнабаев Тәлғәт Әхмәтғәлим улы** 1912 йылда Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Яҡшымбәт ауылында тыуған. 1933 йылдан «Осҡон» колхозы комсомол ойошмаһы сәркәтибе, 1937 йылдан «Уңыш» колхозы рәйесе итеп һайлана. 1939 йылда Яҡшымбәт ауыл советы рәйесе итеп тәғәйенләнеп, бер йыл эшләп тә өлгөрмәй, Бөйөк Ватан һуғышына китә. Ленинград фронтында ике тапҡыр ҡаты яраланып, 1942 йылдың яҙында ауылына ҡайта. «Искра» колхозы рәйесе итеп һайлайҙар. «Искра» колхозы бер нисә йыл Бөтә Союз халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһендә (1954, 1957, 1967 йй.) ҡатнаша. Тәлғәт Аҙнабаев фиҙакәр хеҙмәте өсөн Ленин (1966), Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1957), 2-се дәрәжә Ватан һуғышы ордендары һәм бик күп миҙалдар менән бүләкләнгән. 1969 йылдан хаҡлы ялға сыҡҡан. РСФСР-ҙың персональ пенсионеры. 1980 йылдың 20 майында вафат була.

**Аҡмурзин Үзбәк**. Беренсе башҡорт полкының йөҙ башы. 1812 йылғы Ватан һуғышындағы батырлығы өсөн Изге Георгий ордены, «За взятие Парижа 19 марта 1814 г.» исемле көмөш миҙалдар менән бүләкләнгән.

**Аптыраҡов Күсекәй**. Бошман-Ҡыпсаҡ олусы старшинаһы. 1777 йылдың 21 октябрендә Кинйә Арыҫланов урынына оло вазифаға тәғәйенләнгән. Аптыраҡ ауылында йәшәгән.



10-2001.p65 38 30.10.01, 14:45

**Арыҫланов Ғәфиәтулла Шаһимәрҙән улы** 1915 йылда Кинйә ауылында тыуған. Колхозда хисапсы булып эшләй. Аҡ фин һуғышы яугире. Башҡорттар араһында иң беренсе булып Советтар Союзы Геройы исеме алған (1940). Уның танк батальоны Белгород, Орел, Курск, Харьков, Смоленск, Будапешт ҡалаларын азат итә. Яу яланында һәләк була.

**Арыҫланов Кинйә Аҡкол тархан улы** 1723 йылда Нуғай даруғаһы Бошман-Ҡыпсаҡ олусы Танып ауылында (хәҙерге Мәләүез районы) тыуған. 1770 йылда Кинйә ауылына нигеҙ һалған. Старшина, абыҙ. Килмәк абыҙ мәҙрәсәһен тамамлаған. Рәсәйҙең көньяҡ-көнсығыш сиген һаҡлау буйынса линия (кордон) хеҙмәтен үтәп, батша армияһының хәрби походтарында ҡатнашҡан. Ихтилалға тәүге көндәрҙән үк ҡушыла, Бүгәсәү тарафынан баш полковник, төп ғәскәрҙең отряд командиры итеп тәғәйенләнә. Баш штаб ағзаһы булараҡ, Бүгәсәүҙең башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтары кәңәшсеһе булған, уға хеҙмәт итергә саҡырыусы өндәмәләр, хаттар яҙған. 1774 йылдың сентябрендә хәбәрһеҙ юғалған.

**Арыҫланов Нурамбәк Ғиниәт улы** 1928 йылда Кинйәабыҙ ауылында тыуған. Аграрсы ғалим, иҡтисад фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың Инженерлыҡ академияһының ағза-корреспонденты, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре. К.А.Тимирязев исемендәге Мәскәү ауыл хужалығы академияһын тамамлаған. Ауырғазы районының Батыр МТС-ында, СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалындағы иҡтисади тикшеренеү бүлегендә, БАССР ауыл хужалығы министрлығының план-иҡтисад идаралығында, Башҡортостан ауыл хужалығы институтында эшләй. Рәсәй Фәндәр академияһының Ғилми үҙәгендәге иҡтисад һәм социология ғилми-тикшеренеү институтының әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре. Алты монография авторы. Закон акттары проекттарын эшләүҙә ҡатнаша.

**Байбулатов Раил Фәтхелисләм улы** 1937 йылда Яманғол ауылында тыуған. Башланғыс мәктәпте тамамлағандан һуң, Яманһары ете йыллыҡ мәктәбендә, Мораҡ башҡорт педагогия училищеһында, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтында белем ала. Стәрлетамаҡ балалар йортонда, Башҡортостандың «Китап» нәшриәтендә һәм Башҡортостан яҙыусылар союзында эшләй. Тиҫтәләгән китап авторы. 1984 йылдан Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы. СССР-ҙың матбуғат отличнигы, «Хеҙмәт батырлығы» миҙалы менән бүләкләнгән.

**Баязит Бикбай (Бикбаев Баязит Ғаяз улы)** Ырымбур губернаһының Ырымбур өйәҙе Ҡалта ауылында 1909 йылдың 9 ғинуарында тыуған. Шағир, яҙыусы, драматург һәм тәржемәсе. БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре. Ырымбурҙың башҡорт һәм Өфө педагогия техникумдарында белем алған. Район, республика матбуғат баҫмалары редакцияларында эшләгән (1929-1935). 1944 йылдан профессиональ яҙыусы. Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1955), «Почет билдәһе» (1939) ордендары менән бүләкләнгән. Ауылында уның исемендәге музей бар.

**Биктимеров Сәлмән Ғәлиәхмәт улы** Кинйәбай ауылында тыуған. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының отделение командиры. Днепрҙы тәүгеләрҙән булып аша сыҡҡан өсөн Советтар Союзы Геройы исеме бирелгән.

**Бураҡаев Диҡҡәт Насретдин улы** 1932 йылда Үрге Мотал ауылында тыуған. Геолог. Геология-минералогия фәндәре кандидаты. БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. СССР журналистар союзы ағзаһы. М.В.Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетын тамамлаған.



10-2001.p65 39 30.10.01, 14:45

СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалындағы геологик ғилми-тикшеренеү институтының өлкән лаборанты, кесе ғилми хеҙмәткәре, ғилми сәркәтибе һәм өлкән ғилми хеҙмәткәре булып эшләй. Етмештән артыҡ ғилми хеҙмәт авторы. 1981 йылдың 25 сентябрендә Өфөлә вафат булды.

**Вәхитов Шәүәли Мөхәммәт улы** 1932 йылда Ялсыҡай ауылында тыуған. Ир малсылар араһынан иң тәүге Социалистик Хеҙмәт Геройы (1966). «Таймаç» совхозы һауынсыһы. Партияның XXV съезы делегаты, БАССР-ҙың Юғары Советы депутаты, КПСС өлкә комитеты ағзаһы. Коммунистик хеҙмәт ударнигы. Хәҙер хаҡлы ялда.

**Ғайсин Хәсән Нәзир улы** 1908 йылда Ҡарай ауылында тыуған. Башланғыс мәктәпте тамамлағас, ауыл хужалығы бригадиры булып эшләй. 1942 йылда һуғышҡа китә. Беренсе Прибалтийск фронтының артиллерия орудиеһы һәм станок-пулемет бүлеге командиры була. 1944 йылдың 24 мартында Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

**Ғәҙелйәнова Шәмсиә**. Башҡортостан хеҙмәтсәндәре араһынан иң тәүге Ленин ордены кавалеры. «Көйөргәҙе» совхозы һауынсыһы.

**Ғәниева Тамара (Тимербикә) Әхмәтшәриф ҡыҙы** 1951 йылда Кинйәбай ауылында тыуған. Павловка һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә, Салауат педагогия училищеһында, Стәрлетамаҡ педагогия институтында белем ала. Өфө, Салауат ҡалаларында балалар уҡыта, «Ленинец-Ленинсе» гәзите, Башҡортостан радиоһы, «Башҡортостан ҡыҙы» журналы редакцияларында эшләй. Ете китап авторы. 1986 йылдан Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы.

**Исҡужин Йәүҙәт Ғәли улы** 1930 йылда Урта Мотал ауылында тыуған. Башланғыс мәктәпте тамамлағас, М.Ғафури исемендәге колхозда эшләй. 1944 йылда Үзбәкстандың Сәмәрҡәнд өлкәһенә күскәнлектән, өлкәнең Пахтакор районы балалар йорто урта мәктәбен алтын миҙалға тамамлай. 1948-52 йылдарҙа Сәмәрҡәнд халыҡ хужалығы институтының сауҙа-иҡтисад факультетында уҡый. Ҡаланың ВЛКСМ һәм КПСС район комитеттары Үзбәкстан дәүләт именлек һаҡлау министрлығында эшләргә тәҡдим итә. Уның йәшерен ведомство бүлеге Исҡужинды Ташкент ҡалаһының ике йыллыҡ махсус мәктәбендә уҡыта. Лейтенант званиеһында ул Башҡортостан Эске эштәр министрлығына эшкә ҡайта һәм 1989 йылғаса төрлө юғары вазифалар үтәй. СССР Дәүләт именлеге комитетының Юғары мәктәбен 1961 йылда тамамлай, инглиз телен тулы камиллығында үҙләштерә, бик күп төрки халыҡтары телдәрендә иркен һөйләшә, 1981-83 йылдарҙа Афғанстандың Кандагар зонаһында өлкән советник булып эшләп, ике орден менән бүләкләнә. Хаҡлы ялға сыҡҡас та яңы төҙөлә башлаған комбинат директоры урынбаçары, «Аманат» яуаплылығы сикләнгән дәүләт предприятиеһы уҡыу-методик үҙәге диреторы булып эшләй. «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе урынбаçары вазифаһын үтәй.

**Исҡужин Мөхәммәт Ғәли улы** 1927 йылда Урта Мотал ауылында тыуған. Башланғыс мәктәпте тамамлағас, Васильевкала 5-се синыфты русса уҡый, 6-сыға Абдул ауылына яртылаш татарлаштырылған мәктәпкә йөрөй. 1944 йылда Үзбәкстандың Сәмәрҡәнд өлкәһендә үзбәксә уҡый. 1947 йылда Кәттәкурған ҡалаһы педагогия училищеһын тамамлап, үзбәк балаларын уҡыта. 1954 йылда Сәмәрҡәнд дәүләт университетының физика-математика факультетын тамамлай. 1963 йылда Өфөгә ҡайтып, 210-сы заводта инженер-конструктор булып эшләй, артабан башҡаланың 20-се мәктәбендә 16 йыл өлкән синыфтарҙа физика һәм математика уҡыта. 1989 йылдан алып «Урал» башҡорт халыҡ үҙәгендә халыҡ мәғари-



10-2001.p65 40 30.10.01, 14:45

фы буйынса инструктор булып эшләй. Өфөнөң Инорс микрорайонында 121-се мәктәп-гимназияла, Сипайлово биҫтәһендә 38-се, 29-сы, 84-се мәктәптәрҙә башҡорт синыфтары астыра. Сипайлово биҫтәһендәге 136-сы башҡорт мәктәп-лицейы, Күмертауҙағы 13-сө башҡорт мәктәбе һәм «Айгөл» балалар баҡсаһы, Салауаттағы 25-се башҡорт мәктәбе менән «Йәншишмә» балалар баҡсаһы — уның физакәр хеҙмәт емеше. 1995 йылда Киров районындағы 144-се башҡорт мәктәбе, Дим районы мәктәбендәге башҡорт синыфтары, Өфөнөң Калинин районында 140-сы башҡорт мәктәп-гимназияһы, 252-се башҡорт балалар баҡсаһы, «Аҡтамыр» башҡорт үҙәген ойоштора. 2000 йылдың 24 февралендә Өфөлә вафат булды.

**Ишмаҡаев Әфтәх Ғәти улы** Морапталь ауылында тыуған. Киров исемендәге колхоз рәйесе, КПСС-тың XXIV съезы делегаты һәм 5-се, 11-се саҡырылыш район советы депутаты. 1965 йылда Бөтә Союз халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһендә бронза миҙал менән бүләкләнә.

**Йомағолов Илшат Хәлил улы** 1932 йылда Тимербай ауылында тыуған. Актер һәм драматург. РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы. Өфө сәнғәт училищеһын, А.В.Луначарский исемендәге ГИТИС-ты тамамлай. Мәжит Ғафури исемендәге башҡорт һәм Ғ.Камал исемендәге татар академия театрҙарында эшләй. Башҡорт театр сәхнәһендә 50-нән ашыу образ ижад итә. Кинола, теле- һәм радиоспектаклдәрҙә тиҫтәләгән ролдә уйнай. Өфө сәнғәт училищеһының художество етәксеһе, Өфө сәнғәт институты уҡытыусыһы булып эшләй һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһында Театр берекмәһе ойоштора. 1991 йылдан алып Стәрлетамаҡ мәҙәниәт техникумында курстың художество етәксеһе вазифаһын үтәй. Тиҫтәләгән пьесалар авторы. Уның «Нәркәс» трагедияһы 1974 йылда СССР халыҡтары драматургияһы фестивалендә I дәрәжәле дипломға лайыҡ булды. Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы.

**Йәнбирҙина Зөбәржәт Нәби ҡыҙы** 1945 йылда Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Урта мәктәпте тамамлағас, Күмертау районының «Золотой колос» колхозында һауынсы булып эшләй. Стәрлетамаҡ зоотехник-ветеринария техникумында уҡый. «Золотой колос» колхозында баш зоотехник, Стәрлетамаҡ районы ауыл хужалығы идаралығының өлкән зоотехнигы, Стәрлетамаҡ күн аяҡ кейемдәре фабрикаһы экспедиторы, Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһы рәйесе, ҡаланың 49-сы балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе, Күмертау ҡалаһы яҙыусылар ойошмаһының яуаплы сәркәтибе, Стәрлетамаҡ Яҙыусылар берлегендә әҙәби консультант булып эшләй. Биш китап авторы. 1990 йылдан Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы.

**Ҡобағошов Айрат Минниәхмәт улы** 1950 йылда Таймаҫ ауылында тыуған. Таймаҫ урта мәктәбендә 8 -се синыфты тамамлағандан һуң, Өфөләге Республика 1-се һанлы интернат-мәктәбен, Өфө сәнғәт училищеһының халыҡ инструменттары бүлеген, Өфө дәүләт сәнғәт институтында З.Исмәғилев класын тамамлай (1976-81). Башҡортостан радиоһында музыкаль редактор, 1986 йылдан Өфө сәнғәт институтының фольклор кабинеты мөдире, институттың башҡорт музыкаһы факультетының деканы һәм традицион музыка ҡоралдары кафедраһы мөдире вазифаларын үтәй. Башҡортостан композиторҙар союзы ағзаһы (1989) һәм Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре (1995). Башҡорт вокаль музыкаһына тос өлөш индергән композитор.

**Ҡотлогилдина Зөһрә Сәлимйән ҡыҙы** 1951 йылда Ялсыҡай ауылында тыуған. Ялсыҡай башланғыс, Таймаҫ урта мәктәптәрендә, Башҡорт дәүләт университетында белем ала. «Йәншишмә» (Элекке «Башҡортостан пионеры») гәзите редакцияһында әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлеге мөдире. Биш китап авторы. 1989 йылдан Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы.



10-2001.p65 41 30.10.01, 14:45

**Ҡужаҡов Морат Ғәлләм улы** 1904 йылда Мораптал ауылында тыуған. Башланғыс мәктәбен тамамлағас, «Киров» исемендәге ауыл хужалығы артелендә эшләй. 1941 йылдан 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының командир ярҙамсыһы булып хеҙмәт итә. 1944 йылдың 15 ғинуарында Советтар Союзы Геройы тигән данлы исем бирелә.

**Ҡыуандыҡов Фәиз Ғәриф улы** 1925 йылда Таймаҫ ауылында тыуған. Таймаҫ урта мәктәбендә 8 синыфты тамамлағас Совет Армияһына алына. Бөйөк Ватан һуғышында 1-се Украина фронты яугирҙары менән Көнбайыш Украинаны, Польша менән Чехословакияны азат итеүҙә ҡатнаша. Хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә теркәлеп йөрөй («Память» Республики Башкортостан. Том 14. Уфа, 1997. — 401 с.). Һуғыштан һуң Карпат алды хәрби округында хеҙмәт итә, Көнбайыш Украиналағы һуғыштан һуңғы ваҡиғаларҙа ҡатнаша. 1947-49 йылдарҙа Львов хәрби-сәйәси училищеһын, ә 1952-54 йылдарҙа Совет Ҡораллы Көстәренең пропаганда мәктәбен тамамлай. Алтмышынсы йылдың аҙағынаса Совет Армияһы һәм Хәрби диңгеҙ флоты сафында хеҙмәт итә. Ҡурған-Түбә педагогия училищеһын, Алыҫ Көнсығыш, Ҡырғыҙ дәүләт университеттарын тамамлай. Ике йыл Фрунзе ҡалаһы партия эштәрендә эшләй, 19 йыл Фрунзе политехник, ике йыл Өфө авиация һәм 10 йыл Өфө дәүләт сәнғәт институтында уҡыта. Хаҡлы ялға сыҡҡандан һуң, 2 йыл Башҡорт дәүләт аграр университетында эшләй. Тарих фәндәре кандидаты. «Ватан һуғышы» ордены, «Батырлыҡ өсөн», «Һуғыш ҡаһарманлығы өсөн», «1941-1945 йй. Бөйөк Ватан һуғышында Германияны еңгән өсөн» һәм башҡа миҙалдар менән бүләкләнгән.

**Мөхтәрова (Әхмәтова) Мөхтәрәмә Усман ҡыҙы** 1949 йылда Иҫке Мотал ауылында тыуған. Таймаҫ урта мәктәбендә, Күмертау ҡалаһының 1-се интернат-мәктәбендә, Омск ҡалаһының политехник институтында белем алған. Өфө полиграф комбинатында баҫма цех, флексографик баҫма цех мастеры, яңы техника, хеҙмәт һәм хеҙмәт хәүефһеҙлеген һаҡлау буйынса инженер, баҫма цех етәксеһе, Полиграфия комбинатының баш инженеры, Матбуғат һәм киң информация министлығында баш инженер һәм министр урынбаҫары булып эшләй. Бөгөнгө көндә Башҡортостан Республикаһының матбуғат палатаһы директоры. 1-се класлы дәүләт кәңәшсеһе. «Хеҙмәт ветераны» миҙалы менән наградланған.

**Мәкәүтов Фәйзрахман Ғибәт улы**. Дәүләт эшмәкәре. Ленин ордены кавалеры, партсъезд делегаты.

**Мәнди Ҡотош Ҡыпсаҡи** 1763 йылда Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙе Бесәнсе ауылында тыуған. Ҡурайсы-сәсән. 1830 йыл аҙағында Түкән ауылына күсә. Уның әҙәби мираҫы беҙҙең көндәргә өлөшләтә генә килеп еткән. «Абдулла ахун», «Ваҡыты сәхәр эсендә» тигән әҫәрҙәре Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәгендәге ҡулъяҙмалар фондында һаҡлана. Вафаты 1849 йыл.

**Недошивин Вениамин Георгиевич** 1917 йылда Ермолаево ҡасабаһында тыуған. Ауылының 8 йыллыҡ мәктәбен тамамлағас, ауыл хужалығы техникумында белем ала. 1944 йылдың 5 октябрендә Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Ун биш орден һәм миҙалдар кавалеры.

**Ниәтшин Тимер Әбдрәхим улы** 1946 йылда Илкәнәй ауылында тыуған. Өфөлә Республика 1-се һанлы интернат-мәктәпте, Һамар ҡалаһының политехник институтын тамамлай. Ике китап авторы. 1994 йылдан Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы.

**Раҡаев Аҡбулат**. Аҡбулат ауылын (хәҙер Ҡарай тип йөрөтөлә) нигеҙләүсе. 1774 йылда 1000 кешенән торған ғәскәрҙе етәкләгән.



10-2001.p65 42 30.10.01, 14:45

**Солтангәрәев Рәшит Ғимран улы** 1935 йылда Таймаҫ ауылында тыуған. Яҙыусы, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Таймаҫ урта мәктәбендә, Башҡорт дәүләт университетының тарих-филология факультетында, Мәскәүҙә СССР яҙыусылар союзы эргәһендәге Юғары әҙәби курстарҙа уҡый. «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияһында әҙәби хеҙмәткәр, әҙәбиәт бүлеге мөхәррире, республиканың радио һәм телевидение студияһы мөхәррире, БАССР яҙыусылар союзында әҙәби консультант, «Ағиҙел» журналы редакцияһында баш мөхәррир урынбаҫары булып эшләй. Үҙенсәлекле хикәйәләр оҫтаһы, 1978 йылда нефтселәр тормошон оҫта яҡтыртҡан китабы өсөн Салауат Юлаев исемендәге республика дәүләт премияһы лауреаты исеме бирелә. 2000 йылдың Өфө ҡалаһында вафат булды. Таймаҫ урта мәктәбенә унын исеме бирелде.

**Степанов Евгений Федорович**. СССР Дәүләт премияһы лауреаты. Райондың колхоз-ара төҙөлөш ойошмаһы бригадиры.

**Сәғитов Рәшит Миңнеғужа улы** 1934 йылда Таймаҫ ауылында тыуған. Тыуған ауылында урта мәктәпте тамамлағас, Өфө авиация институтында уҡый. Моторҙар эшләү заводында, «Гидравлика» Өфө дәүләт унитар агрегат предприятиеһында төрлө бүлектәрҙә етәкләй.

**Хисамова Миңлегөл Сәлимйән ҡыҙы** 1948 йылда Ялсыҡай ауылында тыуған. Таймаҫ урта мәктәбендә, Өфөләге Республика 1-се һанлы интернат-мәктәптә уҡый. Башҡаланың быяла-сүс заводында оператор булып эшләй ҙә 1967-72 йылдарҙа Башҡорт дәүләт университетында уҡый. «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияһында, Үргә Ҡыйғы урта мәктәбендә эшләй. Күмертау ҡалаһы, Өфө мәктәптәрендә уҡыта. Дүрт китап авторы. 1994 йылдан Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы.

**Хисамов Ғәлим Афзал улы** 1949 йылда Кинйәбай ауылында тыуған. Павловка ауылында уҡыта, Салауат нефть химияһы комбинатында оператор, Күмертау ҡала-район гәзитендә тәржемәсе, «Башҡортостан» гәзитенең үҙ хәбәрсеһе, партияның Башҡортостан өлкә комитетында инструктор, сектор мөдире, бүлек мөдире урынбаҫары, «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире урынбаҫары, Мәсетле районының «Яңы тормош» гәзите мөхәррире, «Китап» нәшриәте директоры, Башҡортостан Республикаһының матбуғат һәм киң информация саралары министры, «Башҡортостан» гәзитенең баш мөхәррире, Башҡортостандың социаль-страховкалау дәүләт фондының идаралыҡ етәксеһе булып эшләй.

Башҡортостан яҙыусылар союзы ағзаһы. Дүрт роман һәм бик күп башҡа әҫәрҙәр авторы.

**Хохлов Анатолий Иванович** 1918 йылда Бахмут ауылында тыуған. Уҡытыусы. Көнбайыш Воронеж, Беренсе Белорус фронттарының разведчиктар ротаһы командиры. Висланы тәүгеләрҙән булып аша сыҡҡаны өсөн 1945 йылда Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Һуғыштан һуң Өфөнөң район башҡарма комитетында эшләп, хаҡлы ялға сыға. 1995 йылда Өфөлә вафат була.

**Хөсәйенов Хөрмәт Хәмзә улы** 1920 йылда тыуған. Өс Дан ордены кавалеры.

**Шарков Гавриил Антонович** 1927 йылда Анновка ауылында тыуған. БАССР-ҙың атҡаҙанған шахтеры. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан. «Башкируголь» ПБ-һының «Күмертау» күмер разрезында слесарь, экскаватор машинисы ярҙамсыһы һәм машинисы булып эшләгән. Байтаҡ рационализаторлыҡ тәкдимдәре индергән. Ленин һәм Октябрь революцияһы ордендары кавалеры.



10-2001.p65 43 30.10.01, 14:46

**Шикина Людмила Васильевна** Отрада ауылында 1932 йылда тыуған. Ермолаевка урта мәктәбендә белем ала. Мәскәүҙә йәшәй. Горький исемендәге әҙәбиәт институтын, Мәскәү дәүләт университетының журналистика факультетын тамамлаған. СССР яҙыусылар союзы сәркәтибе булып эшләй. Рәсәй яҙыусылар союзы ағзаһы.

**Шәмсетдин Зәки (Ғөбәйҙуллин Шәмсетдин) Йәрәхмәт улы** 1822 йылда Ырымбур губернаһы 10-сы башҡорт кантоны Иҙәк-Ишмәт ауылында тыуған. Суфыйсылыҡ шиғриәтенең атаҡлы вәкиле. Тыумыштан һуҡыр була. Ашҡаҙар-Балыҡлы, Ҡазандың Мөхәмәткәрим мәҙрәсәләрендә уҡый. Тыуған ауылында балалар уҡыта. Стәрлебаш мәҙрәсәһендә эшләй. Шәреҡ поэзияһы һәм ғәрәп классик әҙәбиәте белгесе. 1865 йылда Мәккәгә хаж ҡылырға барған саҡта вафат була. Уның әҫәрҙәре төрки, фарсы, ғәрәп телдәрендә яҙылған ҡулъяҙмалар рәүешендә һаҡланған. Теле афоризмдарға бай, тапҡыр фекерле шағир.

**Чуева Анна Николаева** 1895 йылда тыуған. Бер уңыш сезонында 5200 көлтә бәйләгән колхозсы. Социалистик Хеҙмәт Геройы (1966). 1966 йылда вафат була.

**Әлибаев Сәғит Рәхмәтулла улы** 1903 йылда Яманһары ауылында тыуған. ЧОН отрядында һуғыша. Башҡорт АССР-ның халыҡ мәғарифы комиссары (1946-54). 112-се Башҡорт атлы кавалерияһы дивизияһы комиссары. Ҡыҙыл Байраҡ, Ҡыҙыл Йондоҙ, 1-се һәм 2-се дәрәжәле Ватан һуғышы ордендары кавалеры. Бик күп миҙалдар менән бүләкләнгән. Педагогия фәндәре кандидаты, РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы. Мәғариф өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн «Ҡыҙыл Байраҡ» ордены менән бүләкләнә. 1975 йылда Өфөлә вафат була.

**Әлмөхәмәтов Ғәзиз Сәлих улы** 1895 йылда Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙе Мораптал ауылында тыуған. Йырсы, композитор, музыка йәмғиәте эшмәкәре. «БАССР-ҙың халыҡ артисы» исемен беренсе булып алған. Йәштән йырлап үҫкән, махсус белеме юҡ. 1908 йылда Ташкентта йәшәй. 1914 йылдан профессиональ йырсы булып таныла. 1922-29 йылдарҙа Ҡазанда йәшәй. 1929 йылдан Милли мәҙәниәт ғилми-тикшеренеү институтында эшләй. П.И.Чайковский исемендәге Мәскәү дәүләт консерваторияһы эргәһендә башҡорт студияһы ойоштора, Башҡорт дәүләт филормонияһын асырға ярҙам итә. Концерттар бирә, либреттолар, опералар, башҡорт музыка мәҙәниәтенең торошо хаҡында мәҡәләләр яҙа, йырҙар, марштар ижад итә, халыҡ ижадын йыя. 1937 йылда репрессияға эләгә һәм 1938 йылда атыла. 1957 йылда аҡлана. Ауылында уның исемендәге музей эшләй һәм республика музыка мәктәбе уның исемен йөрөтә.

**Яппаров Яманһары**. Һыуын-Ҡыпсаҡ олусы старшинаһы (1768). Биләмәһендә 121 йорт тотҡан. Бүгәсәү ихтилалы яғына сыҡҡан башҡорт старшиналарының иң беренсеһе. Губернатор әмере менән Ырымбурға ебәрелгән 400 башҡорт 1773 йылда уның етәкселегендә баш күтәргән Яйыҡ казактарына барып ҡушыла. Ихтилал баҫтырылғас, И.Тимашев яғында хеҙмәт итә. Голицын улын аманат итеп алғас, яңынан көрәшкә ташлана. Яманһары ауылында йәшәгән. 1742 йылғы документтарҙа Ҡыпсаҡ олусы йөҙбашы Яманһары Сибаев (Зибаев) тип теркәлгән. 1775 йылда Кинйә Арыҫлановтың улы Селәүсендең ихтилалдағы роле тураһында өҫтәлмә мәғлүмәт алыр өсөн, Салауат менән атаһы Юлайҙы һаҡ аҫтында Мәскәүгә оҙатыр алдынан, Ырымбур губернаторы Муса Имәнғолов менән Яманһарыны үҙ янына саҡыртып ала, әммә тегеләр Селәүсенде һатмайҙар.

*Көйөргәҙе районына арналған тупланманы*
*Миңниса Баһуманова әҙерләне.*



10-2001.p65 44 30.10.01, 14:46